# ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ МӘҒЛҮМӘТТӘРЕ ҠЫҘЫҠЛЫ

*(Дәүләт статистика Федераль хеҙмәте Башҡортостан Республикаһы буйынса территориаль органы Ишембай ҡала бүлексә етәксеһе Г. И. Ғилманова менән әңгәмә)*

**«Торатау», 4 декабрь 2012 йыл,**
**Ишембай районы һәм Ишембай ҡалаһы**
**ижтимағи- сәйәси гәзите,**
**Гүзәл ЗАҺИҘУЛЛИНА әҙерләгән әңгәмә**

***Дәүләт статистикаһы федераль хеҙмәте 2010 йылдың халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтарын эшкәртеүҙе һәм баҫтырыуҙы дауам итә. Әгәр ҙә Рәсәй һәм Рәсәй Федерацияһының субъекттары буйынса халыҡ иҫәбен алыуға бөтә күрһәткестәр буйынса йомғаҡ яһалһа һәм баҫтырылһа, муниципаль берәмектәр буйынса 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыуға хәҙерге ваҡытта этаплап йомғаҡ яһала. Ошо хаҡта һөйләүен һорап, беҙҙең хәбәрсе Дәүләт статистикаһы федераль хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса территориаль органының Ишембай ҡалаһындағы бүлексәһе етәксеһе Г. И. Ғилмановаға мөрәжәғәт итте.***



**– Гөлсинә Ирек ҡыҙы, 2012 йылдың апрель айында муниципаль районда йәшәгән халыҡтың һаны, енесе, йәше тураһында мәғлүмәт киң мәғлүмәт сараларында баҫылып сыҡты һәм Башҡортостанстаттың рәсми сайтына ҡуйылды. Әлеге ваҡытта был мөһим сараның артабанғы һөҙөмтәләре хаҡында нимә әйтә алаһығыҙ?**

*– Ошо көндәрҙә Башҡортостанстат Ишембай районы муниципаль районы буйынса өҫтәмә мәғлүмәт бирҙе. Халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтарында бигерәк тә муниципаль районда йәшәгән кешеләрҙең милли составы тураһында мәғлүмәт ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Рәсәй һәм Башҡортостан буйынса төп һандар*

*халыҡҡа еткерелгән, йәмәғәтселек һәм ғилми йәмғиәт уларҙы ҡыҙыҡһынып тикшерә. 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Республикаһында 160 милләт вәкиле йәшәй, иң күп һанлы милләттәр төркөмө - рустар (36 процент), башҡорттар (29,5 процент), татарҙар (25,4 процент). Ишембай районы муниципаль районында 57 милләт вәкилдәре йәшәй. Республикалағы кеүек үк, беҙҙә лә иң күп һанлы милли төркөмдәрҙе рустар (42,2 процент), башҡорттар (41,5 процент) һәм татарҙар (12,3 процент) тәшкил итә. Артабан сыуаштар(1,8 процент), украиндар (0,6 процент), белорустар (0,2 процент) һәм 1,4 проценты башҡа милләттәр.*

**– Муниципаль кимәлдә шулай ук мәғариф буйынса йомғактар яһалған. Беҙҙең гәзит укыусыларға ошо мәғлүмәтте лә хәбәр итһәгеҙ ине.**

*– Халыҡ иҫәбен алғанда дөйөм һәм юғары белемле 15 йәштән һәм унан олораҡ 74478 кеше теркәлгән, улар был йәш төркөмөнөң 98,6 процентын тәшкил итә. Дөйөм һандың 14,2 проценты юғары белемле (2002 йылда 9,3 процент ине), тулы булмаған юғары белемлеләр - 3,1 процент (2002 йылда 1,6 процент ине), урта һөнәр белемлеләр 31,8 процент (2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса 26,8 процент ине), башланғыс һөнәр белемле 13,5 процент (22,5 процент). Районда 62 фән кандидаты һәм ике фән докторы бар. 15 йәштәге һәм унан олораҡ халыҡтың 0,7 проценты белемһеҙ, 2002 йылда 1,6 процент ине.*

*Уҙған халыҡ иҫәбен алыуҙа тәүге тапҡыр 0-9 йәштәге балаларҙың мәктәпкәсә мәғариф учреждениеларына йөрөүе тураһында мәғлүмәт алынды. Өс йәшкә тиклемге балаларҙың 21 проценты - 776 бала мәктәпкәсә мәғариф учреждениеларына йөрөй, был әсәләрҙең балаларын өс йәшкә тиклем тәрбиәләүгә дәүләт биргән отпускы хоҡуғын файҙаланыуы хаҡында һөйләй. 3-6 йәштәге 2449 бала йәки кескәйҙәрҙең 80,6 проценты мәктәпкәсә уҡыуға йәлеп ителгән. Өс йәштән туғыҙ йәшкә тиклемге 731 бала йәки кескәйҙәрҙең 10,5 проценты мәктәпкәсә йәки дөйөм белем биреүгә йәлеп ителмәгән.*

*Ишембай районы муниципаль районында йәшәүсе халыҡтың никах хәле тураһында ла ҡайһы бер мәғлүмәттәр бар. Халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә ҡарағанда беҙҙең муниципаль районда 34 мең ғаилә йәшәй. Дөйөм һандың 3 мең ирле-ҡатынлы пары йәки 8,6 проценты никахын теркәмәгән.*

*Артабан да гәзит уҡыусыларҙы 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтары менән таныштырып барасаҡбыҙ. Уҙған сарала тәүге тапҡыр халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтары муниципаль берәмектәр, ауыл биләмәләре буйынса яһала. Күрһәткестәрҙе белеү һәр кем өсөн ҡыҙыҡлы һәм файҙалы, тип уйлайым.*

*Шуны әйтеп үтеү мөһим: муниципаль райондар буйынса халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек һәм уны уҙғарыу сифаты буйынса Дәүләт статистикаһы федераль хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса территориаль органы Башҡортостан Хөкүмәте менән берлектә 2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен әҙерләүгә һәм уҙғарыуға ҙур шәхси өлөш индергәне өсөн Ишембай районы муниципаль районы хакимиәте башлығы Марат Хөсәйен улы Ғайсинды Дәүләт статистикаһы федераль хеҙмәтенең тармаҡ отличие билдәһе – “2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙы үткәреүҙәге хеҙмәттәре өсөн” миҙалы менән наградланы. Марат Хөсәйен улын ошо лайыҡлы награда менән ҡотлайбыҙ һәм Ишембай районы муниципаль районы халҡы ихтыяжында уңышлы эшмәкәрлек теләйбеҙ!*